Башҡортостан Республикаһы
Сибай ҡалаһы ҡала округы
Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге- «Ҡурай» балалар баҡсаһы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕН ӨЙРӘНЕҮҘӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ СИСТЕМАЫН КАМИЛЛАШТЫРЫУ БУЙЫНСА ПРОЕКТ ЭШЕ**

# ТЕЛЕ БАРҘЫҢ ИЛЕ БАР

**СИБАЙ - 2021**

**ПЛАН**

1.Инеш һүҙ.
2. Проекттың актуаллеге
3.Проекттың маҡсаты һәм бурыстары
4. Эш формалары .
5. Проектты тормошҡа ашырыу этаптары.
6. Проекттың план – графигы.
7. Проектты тормошҡа ашырыу ресурстары.
8. Көтөлгән һөҙөмтә.
9. Проектты бойомға ашырыу барышындағы ҡаҙаныштар.
10.Ҡулланылған сығанаҡтар
Ҡушымта.

**Инеш һүҙ**

Әлеге проект түбәндәге норматив документтарға таянып төҙөлдө:

- Бала Хоҡуғы тураһында конвенция;
- Рәсәй Федерацияһының телдәр тураһындағы Законы (№1807-1, 25.10.1991й.);
- Рәсәй Федерацияһы Президенты указы менән раҫланған Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы (№ 1666, 19.12.2012й.)
- «Рәсәй Федерацияһында белем биреү» тураһындағы Закон (№273-ФЗ, 29.12.2012 й.);
- Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте раҫлаған « 2015-2025 йылдарға Тәрбиә үҫтереү стратегияһы» (№996- р,29.05.2015 й..);
- Мәғариф һәм фән Министрлығы раҫлаған «Мәктәпкәсә белем биреүгә Федераль дәүләт стандарты» (№ 1155, 17.10.2013 й.);
- «Башҡортостан Республикаһыда телдәр тураһындағы» Закон (2020 йылдың 7 декабрендә индерелгән үҙгәрештәр менән);
- «Башҡортостан Республикаһында белем биреү тураһындағы» Закон (N 696-з, 01.07.2013 й.);
- Муниципаль мәкәтпәкәс белем биреү бюджет учреждениеһы Бала үҫтереү үҙәге – «Ҡурай» балалар баҡсаһының Уставы.

«Ҡурай» балалар баҡсаһы педагогтары мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем – тәрбиә биреү эштәрен башҡорт телендә алып бара.

Башҡорт телендә халҡыбыҙҙың бөйөклөгө, уның күп быуаттарға һуҙылған тарихы, мәҙәниәте, быуындар бәйләнеше, үҙенсәлеклеге сағыла. Беренсенән, башҡорт теле - быуындан быуынға күсеп килгән баһалап бөткөһөҙ бүләк. Икесенән, башҡорт теле – дәүләт теле.

Дәүләт теленең ҡәҙерен белеү һәм уны хөрмәт итеү – һәр башҡорттоң гражданлыҡ бурысы, сөнки тыуған тел кешелектең мөһим байлығы, уның мәғәнәле мираҫы.

Балалар баҡсаһында балалар тыуған тел аша мәҙәниәттең, тарихтың матди һәм рухи байлығына ылығалар (нәфис әҙәбиәткә, фольклорға, һүрәтләү эшмәкәрлегенә һ.б.), уратып алған донъя тураһында белемдәр алалар. Һүҙ менән балалар үҙҙәренең фекерҙәрен, тойғоларын, тәьҫораттарын, ихтыяждарын, теләктәрен белдерәләр. Башҡорт теле, тыуған тел булараҡ, балаларға иркен фекер йөрөтөргә, һығымта яһарға, предметтар һәм күренештәр араһындағы ябай бәйләнештәрҙе үҙләштерергә ярҙам итә. Тыуған тел балаларға әхлаки тәрбиә биреүҙә лә ҙур рол уйнай.

Тыуған тел аша бала әхлаки сифатарҙы үҙләштерә.

Шулай булыға ҡарамаҫтан, хәҙерге заман йәштәре араһында тыуған телгә ҡарата битарафлыҡ,уны хөрмәт итмәү  эгоизм, цинизм  сифаттары киң таралған. Был  әлбиттә халҡыбыҙҙың киләсәге тураһында борсолоу тыуҙыра, сөнки илебеҙҙең яҙмышы тулы мәғәләнә йәмғиәттең үҫеше менән бәйле.  Бөйөк рус яҙыусыһы Л.Н.Толстойҙың  «кешенең әхлаклығы унының телгә, һүҙгә ҡарата мөнәсәбәтендә сағыла» тигән һүҙҙәре хәҙерге заманда ла үҙенең актуалеген юғалтмай.

Шуға күрә телебеҙгә ҡарата ыңғай ҡараш, һөйөү, уны хөрмәт итеү тойғолары тәрбиәләү ғаиләлә, артабан  балалар баҡсаһында  дауам ителгәнен иҫтән сығармай, белем – тәрбиә биреү эштәрен тик саф башҡорт телендә алып барабыҙ. Телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, балаларға этонкультуралы белем биреү эштәрендә заманса технологиялар ҡулланыу бик ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

Тәкдим иткән проект башҡорт телен һаҡлауға, үҫтереүгә, мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы милли мәҙәниәткә, традицияларға, ғөрөф – ғәҙәттәргә, кәсептәрен өйрәнеүгә йүнәлтелгән.  Бының өсөн инновацион технологиялар ҡуллланыу иҫәпкә алына.

Ппоектты тормошҡа ашырыу сиктәрендә  телебеҙҙе үҫтереүгә ҡағылышлы төрлө саралар планлаштырыла. Улар төрлө  йүнәлештә тормошҡа ашырыла: балалар менән, ата – әсәләр (законлы вәкилдәр) менән, педагогтар менән.

Семинар – практикумдар, оҫталыҡ синыфтары, конференциялар, түңәрәк өҫтәлдәр, халыҡ ижадына ҡағылышлы  балалар менән өҫтәлмә белем биреү эштәре һ.б. ойошторласаҡ. Тәрбиәләнеүселәрҙең төрлә конкурстарҙа, күргәҙмәләрҙә, фестивалдәрҙә ҡатаншыуы, халыҡ байрамдары ойоштороу, төркөмдәрҙә мини – музейҙар ойоштороу, белем биреү эшмәкәрлектәрендә (айырыуса телмәр үҫтереүҙә) төрлө  яңы заманса технологиялар ҡулланыукүҙ уңында тотола.

Проектты тормошҡа ашырыу барышында төрлө йүнәлешле методик ҡулланмалар, ә 2020-2021 уҡыу йылы аҙағында «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә инновацион технологиялар», «Проект эшмәкәрлеге аша әхлаки – илһөйәрлек тәрбиәһе биреү», «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халыҡ мәҙәниәтенә ылыҡтырыу» темаһына методик тәкдимдәр йыйынтығы донъя күрәсәк.

Иң мөһиме, проект үҫеп килеүсе быуынға үҙ телебеҙгә ҡарата хөрмәт итеү тойғоһо үҫтерергә, уны өйрәнеүгә теләк  уятырға булышлыҡ итә.

**Проекттың актуаллеге**

Мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреүҙең мөһим бурыстарының береһе белем – тәрбиә биреү сифатын күтәреү һәм ғаиләләрҙең социаль, экономик, мәҙәни кимәлдәрен иҫәпкә алмай белем алыуға бер тигеҙ мөмкинселктәр булдырыу. Ошонан сығып *тыуған телде һаҡлау һәм үҫтереү буйынса эштәрҙең сифатын күтәреү* иң актуаль проблемаларҙың береһе булып тора.

Федераль дәүләт белем биреү стандартында балалар баҡсаһының программаһын үҙләштереү һөҙөмтәләренә талаптар бирелгән. Улар маҡсатлы ориентирҙар формаһында билдәләнә. Беҙгә ҡалһа, маҡсатлы – ориентирҙарҙың айырыуса әһәмиәтлеләренең береһе телмәр үҫтереү менән бәйле: «бала телдән һөйләү телмәрен яҡшы үҙләштергән, үҙенең фекерҙәрен һәм теләген тел аша аралашыу ситуацияларында сағылдыра ала, һүҙҙәрҙә өндәрҙе айыра ала, грамтаға өйрәнеү өсөн тәүшарттар барлыҡҡа килә». «Башҡортостан Республикаһында телдәр тураһындағы» Закон «һәр кешегә тыуған телен ҡулланыу хоҡығына гарантия бирә».

Ғалим – лингвистар раҫлауынса, тел юҡҡа сыҡмаһын өсөн кәмендә 100000 кеше шул телдә һөйләшергә тейеш. 2009 йылда ЮНЕСКО эксперттары башҡорт телен « Телдәрҙең Ҡыҙыл китабына» индерә. Эксперттарҙың фаразлауынса башҡорт теле «ныҡлы булмаған» телдәр иҫәбенә инә. ЮНЕСКО ғалимдары «балалар башҡорт телендә һөйләшә, әммә уның ҡулланыш сфераһы тик көнкүреш менән сикләнә» тип белдерә. Был беҙҙе, педагогтар буласаҡ, хафаға һала һәм беҙ тел темаһына ҡағылышлы һорауҙарҙа битараф ҡала алмайбыҙ.

Владимир Иванович Даль бик дөрөҫ әйткән бит: «Әгәр ҙә тел үҙенең тыуған һуты һәм тамыры менән һуғарылмаһа, тел белем биреү менән бер рәттә бармаясаҡ.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ғаиләләрҙә нәфис әҙәбиәт, фольклор ҡабул итеү эшмәкәрлектәренә, башҡорт халҡының ижады, мәҙәниәте, сәнғәте менән таныштырыуға бик аҙ ваҡыт бүленә. Балалар күбеһенәс телевизор, компьютер артарында ултырып телебеҙҙең матурлығын, төҙөклөгөн ишетеү ҙән мәхрүм булалар. Киң мәғлүмәт саралары ла был йәһəттән эталон булып хеҙмәт итә алмауы бер кемгә лә сер түгелдер, башҡорт телендә кесәйҙәр һәм башланғыс синыф уҡыусылары өсөн өйрәтеү программалаы күп түгел.

Ғомүмән, башҡорт ғаиләләрендә тәрбиәләнгән балаларҙың телмәр үҫеш кимәле етерлек кимәлдә түгел. Был нимә менән бәйле һуң?
Беренсенән, ҡыҙғаныҫҡа ҡарша, күп ата – әсәләр үҙҙәре башҡорт телендә һөйләшмәйҙәр.Шуа күрә уларға балалар менә аралашыуы ауыр.

Икенсенән, педагогтар балалар баҡсаһы үҙләштергән Программаға ярашлы телмәр үҫтереү эшмәкәрлеген әүҙем ойоштороҙарына ҡарамаҫтан, бөгөнгө мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың бәйләнешле телмәрҙәре ныҡлап үҫешеп етмәгән.

Тимәк, балалар баҡсаһында өҫтөнлөклө бурыстарҙың береһе – бәйләнешле таҙа һөйләшергә өйрәтеү.

Өсөнсөнән, балаларҙың телмәрендә булған кәмселектәр телгә ҡарата йәмғиәттә булған кире факторҙаға бәйле :

- йәмғиәттә телмәр культураһының глобаль масштабта кәмей барыуы;

- ата – әсәләрҙең һәм педагогтарҙың балаларҙың телмәр үҫешенә етешле иғтибар бүлмәүҙәре;

- ата – әсәләрҙең, педагогтарҙың нәфис башҡорт телендә таҙа һөйләшә белмәүҙәре.

Блаларҙың телмәрен уңышлы үҫтереү өсөн баланы һәр ваҡыт һөйләшергә, фекер йөрөтөргә өйрәтергә кәрәк. Быға заман талаптарына ярашлы яңы технологиялар ярҙамға килә.

Шулай итеп, проекттың актуаллеге башҡорт телен, халыҡ традицияларын, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү менән бәйле.

*Беҙ мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт теленә өйрәтеү буйынса башҡорт халкының мәҙәни – әхлаки традицияларына нигеҙләнгән һәм телмәр үҫтереү йөкмәткеһе менән интерграцияға ингән эш системаһы тәкдим итәбеҙ. Шулай ук телмәр үҫтереүҙә заманса технологияларҙы киң ҡулланыуҙы күҙаллайбыҙ.*

**Проекттың максаты**

Башҡорт балалар баҡсаһы шарттарында инновацион технологиялар ҡулланыу аша башҡорт телен һаҡлауға, үҫтереүгә һәм популярлаштырыуға булышлыҡ итеү.

**Проекттың бурыстары**

1. Инновацион технологиялар ҡулланыу аша мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәр культураһын үҫтереү;
2. Башҡорт теленең байлығын, этномәҙәниәтле традицияларҙы пропагандалауҙа педагогтарҙың һәм ата – әсәләрҙең (законлы вәкилдәрҙең) ҡатнашыуын тьәмин итеү;
3. Башҡорт теле тураһында дәүләт теле , Башҡортостан гражданының культураһын һаҡлау сараһы булараҡ күҙаллауҙар формалаштырыу;
4. Проект буйынса эшмәкәрлекте һәм уның һөҙөмтәләре тураһында мәғлүмәттәрҙе таратыу аша киң йәмғиәт ойошмалары иғтибарын йәлеп итеү.

5. Телмәр үҫтереүҙә иновацион технологиялар ҡулланыу буйынса педагогтарҙың эш тәжрибәһен дөйөмләштереү һәм таратыу.

**Проектта ҡатнашыусылар:** педагогтар, тәрбиәләнеүселәр, ата – әсәләр (законлы вәкилдәр)

**Проектты тормошҡа ашырыу ваҡыты-** оҙайлы, 2018- 2019 уҡ.й; 2019-2020 уҡ.й; 2020-2021 уҡ.й




**Проектты тормошҡа ашырыу барышында балалар менән эш формалары**

- Педагогик диагностика (проекттың башында һәм аҙағында).
- Тематик әңгәмәләр.
- Телмәр үҫеше, социаль –коммуникатив үҫеш, танып белеү үҫеше, художестволы – эстетик үҫеш өлкәләре буйынса инновацион технологялар ҡулланылған ойошторолған белем биреү эшмәкәрлектәре.
- Халыҡ сәнғәте изделиелары, хужалыҡ – көнкүреш әйберҙәре, тураһында альбомдар, иллюстраицялар, асылмалар ҡарау.
- Шиғырҙар, һынамыштар, һанашмаҡтар, әүрәткес – һөйгөстәр, тиҙәйткестәр, халыҡ йырҙары һүҙҙәрен ятлау.
- Башҡоростан яҙыусыларының, шағирҙарының балалар өсөн әҫәрҙәре менән танышыу.

- Уйындар: өҫтәл арты, дидактик, хәрәкәтле, сюжетлы — ролле.
- Эҙләнеү – тикшеренеү эшмәкәрлеге ойоштороу.
- Ата – әсәләр менән берлектә проект эшмәкәрлектәре ойоштороу..
- Балаларҙың ижади эштәренән күргәҙмә .
- Ата – әсәләр ҡатнашлығында башҡорт халҡының биҙәү – ҡулланма сәнғәте буйынса һүрәттәр конкурсы.
- Крайҙы өйрәнеү буйынса музейгә экскурсиялар.
- Виртуаль экскурсиялар.
- Күңел асыу саралары, фольклор байрамдары.
- Халыҡ уйындары, шул иҫәптән түңәрәк уйындары ойоштороу.
- Мини – музейҙар биҙәүҙә балаларҙы йәлеп итеү.
- Төрлө кимәлдәге конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашыу.

**Ата – әсәләр (законлы вәкилдәр) менән эш планы**

- Мәктәпкәсә йәштәге балаларға этник мәҙәниәтле белем биреү буйынса ата – әсәләргә анкеталар үткәреү.
- Консультациялар ойоштороу.
- Башҡорт халының тормош – көнкүрешен, кәсеп – һөнәрҙәрен эсенә алған мини – музейҙар конкурсында ҡатнашыу.
- Әңгәмәләр.
- Селтәрҙәр, һаҡалдар эшләү буйынса ата – әсәләргә оҫталыҡ синыфы ойоштороу.
- Футболкалар һәм күлдәктәрҙе этностилдә биҙәү буйынса оҫталыҡ синыфтары ойоштороу.
- Байрамдарға поделкалар эшләү буйынса оҫталыҡ синыфтары.
- Башҡорт халҡының кәсеп – һөнәрҙәрен сағылдырыусы материалдар йыйыҙа ата – әсәләрҙе йәлеп итеү.
- Башҡорт халҡының традицияларын, мәҙәниәтен, тормош-көнкүрешен, биҙәү – ҡулланма сәнғәтен сағылдырыусы папка - йәймәләр әҙерләү.
- Ғаиләләрҙең төрлө флешмобтарҙа, конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашыуы.

**Педагогтар менән эш формалары**

- Консультациялар.
- Оҫталыҡ синыфтары, асыҡ эшмәкәрлектәр ойоштороу.
- Төрлө технолгияларҙы өйрәнеү буйынса семинар - практикумдар.
- Методик яҡтан ярҙам күрһәтеү.

- Дидактик уйындар әҙерләү.
- Үҙ белем кимәлен күтәреү эштәре.
- Педсоветтар.
- Төрлө кимәлдәрҙә ойошторолған педагогик оҫталыҡ конкурстарында, фестивалдәрҙә ҡатаншыу.

**Проектты тормошҡа ашырыу этаптары**

Проекты тормошҡа ашырыу өс этаптан тора: ойоштороу этабы, , төп этап, һәм йомғаҡлау этабы.

Ойоштороу этабында проект әҙерләү буйынса:

- эшсе төркөм булдырылды;
- норматив – хоҡуки документтар өйрәнелде;
- Башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү, этник мәҙәнәтле белем биреү буйынса консультациялар циклы ойошторолдо.

Төп этапта балалар баҡсаһында белем биреү эшмәкәрлеге системаһын камиллаштырыу буйынса проектты тормошҡа ашырыу эшмәкәрлектәре ойошторолдо.

Йомғаҡлау этабында проект эшмәкәрлегенә һығымта яһалды.

**Проектты тормошҡа ашырыу буйынса план – график**

| **№** | **Саралар** | **Үткәреү ваҡыты** | **Ҡатнашыу кимәле** | **Яуаплылар** |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Проект буйынса эшсе төркөм булдырыу | Сентябрь 2018й | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Өлкән тәрбиәсе |
| 2 | Проект темаһы буйынса норматив документтар өйрәнеү | Сентябрь - октябрь 2018й | Балалар баҡсаһы | Эшсе төркөм |
| 3 | Мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреүҙә ҡулланылған инновацион технологиялар буйынса консультациялар циклы | 2018-2019 уҡ.й.<br>2019-2020 уҡ.й<br>2020-2021 уҡ.й | Балалар баҡсаһы | Өлкән тәрбиәсе<br>Тәрбиәселәр<br>Белгестәр |
| 4 | Педагогтар өсөн консультация «Педагогтың телмәр грамотаһы – балаларҙың телмәрен формалаштырыуҙа иң мөһим шарт » | Октябрь 2019й. | Балалар баҡсаһы | Уҡытыусы - логопед |
| 5 | Консультация «Баланы шәхес итеп үҫтереүҙә тыуған телдең роле» | Ноябрь 2019 | Балалар баҡсаһы | Педагог-психолог |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 6 | Консультация «ФГОС талаптарына ярашлы балалар баҡсаһында телмәр үҫтереү » | Октябрь 2018 | Балалар баҡсаһы | Өлкән тәрбиәсе |
| 7 | Рәсәй Федерацияһы мәғарифты үҫтереү институтының «Федераль дәүләт белем биреү талаптарын тормошҡа ашырыу сараһы булараҡ вариатив – үҫтереүсе белем биреү» («Вариативно – развивающее образование как инструмент достижения требований ФГОС ДО») темаһына ярашлы «телмәр үҫтереү» һәм «танып белеү үҫтереү» йүнәлештәре буйынса эксперименталь майҙансыҡ эштәрен ойоштороу | 2018-2019<br>2019-2020 | Рәсәй Федерацияһының мәғарифты үҫтереү институты | Эксперимент майҙансығының эшсе төркөмө |
| 8 | «Йыл педагогы- 2018» Башҡортостан Республикаһы конкурсында ҡатаншыу | 2018г. | Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереү институты | Тәрбиәсе<br>Валиева Н.З. |
| 9 | Сибай ҡалаһының башҡорт төркөмдәрендә эшләүсе тәрбиәселәр өсөн ойошторолған «Телмәр үҫтереүҙә инновацион технологиялар» фестивалендә ҡатнашыу | 2018-2019 | Сибай ҡалаһының мәғариф бүлеге | Тәрбиәсе<br>Мәхмүтова М.З. |
| 10 | Балалар баҡсалары педагогтары өсөн Башҡортостан Республикаһы мөғарифты үҫтереү институты ойошторған инновацион практикалар фестивалендә ҡатнашыу | 2018-2019<br>2019-2020<br>2020-2021 | Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереү институты | Тәрбиәселәр<br>Ишҡыуатова З.М.<br>Валиева Н.З.<br>Хасаева Г.З.<br>Дәүләтҡолова Н.Р.<br>Уҡытыусы - дефектолог<br>Ғәйетова З.Р. |
| 11 | Башҡортостанда «Берҙәм Рәсәй» партияһы | 2018-2019<br>2020-2021 | Башҡортостандың «Берҙәм Рәсәй» | Тәрбиәселәр<br>Мәхмүтова М.З. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | тарафынан ойошторолған үҫеп килгән быуынға рухи – әхлаки тәрбиә биреү буйынса иң яҡшы модель «За честь Республики» конкурсында ҡатаншыу | | партияһы | Хасаева Г.З. |
| 12 | «Рыбаков фонды» ойошторған Л.С.Выготский исемедәге педагогтар һәм студенттар араһындағы конкурста ҡатнашыу | 2018-2019 | «Рыбаков фонды» | Уҡытыусы – дефектолог Ғәйетова З.Р.. |
| 13 | Сибай ҡалаһы Администрацияһы башлығы грантына Йәш педагог» конкурсында ҡатнашыу | 2018-2019 | Сибай ҡалаһы Администрацияһының мәғариф бүлеге | Тәрбиәсе Мәхийәнова Ю.И. |
| 14 | Рәсәй Президенты гранты конкурсында «Ҡаршылыҡһыҙ донъя» («Мир без преград») проекты менән ҡатнашыу | 2019-2020 | Сибай ҡалаһы Администрацияһының мәғариф бүлеге | Балалар баҡсаһы мөдире Эшсе төркөм |
| 15 | Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайы тарафынан ойошторолған флешмобтарҙа, онлайн – конкурстарҙа, бәйгеләрҙә ҡатнашыу | 2018-2019<br>2019-2020<br>2020-2021 | Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайы | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Өлкән тәрбиәсе<br>Педагогтар |
| 16 | Семинар – практикум «Телмәр үҫтереүҙә ҡулланылған заманса технологиялар» | Ноябрь 2018 | Балалар баҡсаһы | Өлкән тәрбиәсе |
| 17 | Семинар «Әсә фольклоры аша кескәйҙәрҙә тыуған төйәккә ҡарата һөйөү уятыу» | Декабрь 2018 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәсе Хасаева Г.З. |
| 18 | Оҫталыҡ синыфы «Метафоралар һәм йомаҡтар төҙөү технологияһы» | Ғинуар 2019 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәсе Мәхмүтова М.З. |
| 19 | Сибай ҡалаһының мәғариф ветерандары | Ғинуар 2019 | Сибай ҡалаһы Администрацияһының | Кәримова Й.С. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | ҡатнашлығында ойошторолған фәнни – ғәмәли конференцияла «Әхлаки – илһөйәрлек сараһы булараҡ мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халыҡ мәҙәниәте сығанаҡтарына ылыҡтырыу» темаһы менән сығыш яһау | | мәғариф бүлеге | |
| 20 | Республика масштабында ойошторолған «Милли кейем- халҡымдың мираҫы» темаһына берҙәм дәрес конкурсында ҡатнашыу | 2019-2020 уч.г | Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереү институты | Тәрбиәселәр |
| 21 | «Милләт әсәһе» конкурсында ҡатнашыу | 2019-2021 | Башҡортостан Республикаһының Башҡорт ҡатын – ҡыҙҙары ойошмаһы | Педагогтар |
| 22 | Сибай ҡалаһының балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәрендә эшләүсе тәрбиәселәр өсөн «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың образлы телмәрен үҫтереү» темаһына алдынғы эш тәжрибәһен дөйөмләштереү | Февраль 2020 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәсе Мәхмүтова М.З. |
| 23 | Консультация «Бәйләнешле телмәр үҫтереүҙә Пропп карталарын ҡулланыу» | Март 2020 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәсе Рәсүлева Л.Н. |
| 24 | Семинар – практикум « Башҡорт яҙыусыларының шиғырҙарын ятлауҙа мнемотехника алымы» | Апрель 2020 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәсе |
| 25 | Сибай ҡалаһының мәғариф ветерандары ҡатнашлығында ойошторолған фәнни – ғәмәли конференцияла «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләүҙә | Ноябрь 2020 | | Тьютор Кәримова Й.С. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | башҡорт халҡының этник мәҙәни үҙенсәлектәрен ҡулланыу буйынса педагогтарҙың компетентлығын үҫтереү» темаһы менән сығыш яһау | | | |
| 26 | Педсовет «Мәктәпкәсә йәщтәге балаларға рухи – әхлаки тәрбиә биреү үҙенсәлектәре» | 2018-2019 | | Заведующий Старший воспитатель |
| 27 | Педсовет «Мәктәпкәсә йштәге балаларға әхлаки – ватансыллыҡ тәрбиәһе биреүҙә проекттар технологияһын ҡулланыу» | 2020-2021 | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире Өлкән тәрбиәсе |
| 28 | Әхлаки – илһөйәрлек тәрбиәһе биреү буйынса проекттар йәрминкәһе | Декабрь 2020 | Балалар баҡсаһы | Ижади төркөм Педагогтар |
| 29 | Семинар «Бәйләнешле телмәр үҫтереү ысулы булараҡ сторителлин технологияһын ҡулланыу» | Ғинуар 2021 | Балалар баҡсаһы | Уҡытыусы – логопед |
| 30 | Оҫталыҡ синыфы «Пропп карталары – әкиәттәр уйлап сығарыу һәм грамотлы дөрөҫ һөйләшергә өйрәнеү нигеҙе » | Февраль 2021 | Балалар баҡсаһы | Старший воспитатель |
| 31 | Семинар – практикум «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙә критик фекер йөрөтөү технологияһы» | Март 2021 | Балалар баҡсаһы | Тьютор Кәримова Й.С. |
| **Йәш педагогтар менән эш** | | | | |
| 1 | Консультация «Фонетик ритмика ысулы аша мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың өндәр культураһын үҫтереү» | Ноябрь 2020 | Балалар баҡсаһы | Уҡытыусы – дефектолог Ғәйетова З.Р. |
| 2 | Семинар «ЛЕГО конструкторҙары балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүсе сара » | Декабрь 2020 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәсе Ишҡыуатова З.М. |
| 3 | Консультация «Һаулыҡ | Ғинуар | Балалар баҡсаһы | Уҡытыусы – |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | мөмкинселектәре сикләнгән балаларҙың артикуляция аппаратын үҫтереүҙә биоэнергопластика технологияһы» | 2021г. | | логопед Рәхмәтуллина Р.Р. |
| 4 | Семинар – практикум «Штернбергтың ребус – алымы балаларҙың фекерләү эшмәкәрлеге активлығын әүҙемләштереү сараһы» | Март 2021 | | Тьютор Кәримова Й.С. |
| 5 | Балалар баҡсаһында өҫтәлмә белем биреү:<br>- «Үҫешәбеҙ» танып белеү эшмәкәрлеге буйынса;<br>- «Һүҙбай» телмәр үҫтереү буйынса;<br>- «Менталь арифметика»;<br>- «Әсә фольклоры»- телмәр үҫешендә халыҡ ижадын, әсә фольклорын ҡулланыу;<br>- «Донъяны өйрәнәм »- танып белеү эшмәкәрлеге буйынса;<br>- «Уйнап үҫәбеҙ» социаль – коммуниткаив үҫеш буйынса;<br>- «Һаумы, һаумы әкиәт!» телмәр үҫтереү, халыҡ ижадына ылыҡтырыу;<br>- «Тылсымлы бармаҡтар»- телмәр үҫтереү буйынса;<br>- «Күңелле бумала» биҙәү – ҡулланма сәнғәтен өйрәнеү буйынса;<br>- «Робототехника» | 2018-2021 | | Белгестәр<br><br>Тәрбиәселәр |
| **Мәктәпкәсә йәштәге балаларға этник мәҙәниәтле белем биреүҙә үҫтереүсе күргәҙмәле аралыҡ мөхите булдырыу** | | | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Төркөмдәрҙе интерактив ҡулланмалар һәм йыһаздар менән тәьмин итеү | Йыл әйләнәһенә | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Өлкән тәрбиәсе |
| 2 | Балалар баҡсаһы коридорында «башҡорт әкиәттәре ҡаласығы» ойоштороу | 2018-2019 | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире |
| 3 | Смотр – конкурс «ФГОС талаптарына ярашлы иң яҡшы телмәр үҙәге» | 2018-2019 | Балалар баҡсаһы | Эксперт төркөмө |
| 4 | Робототехника кабинетын телмәр үҫтереүгә ярашлы төрлө LEGO конструкторҙар, моделдәр менән тулыландырыу | 2018-2019<br>2019-2020 | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире |
| 5 | Һаулыҡ мөмкинселектәре сикләнгән балаларға лекотека асыу | 2019-2020 | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире |
| 6 | Конкурс «Региональ йөкмәткеле иң яҡшы сюжетлы – ролле уйын» | Декабрь 2019 | Балалар баҡсаһы | Эксперт төркөм<br>Тәрбиәселәр |
| 7 | Балалар баҡсаһында этник йөкмәткеле мини – музей булдырыу | Август - сентябрь 2020г. | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Ижади төркөм |
| 8 | Еңеү музей ойоштороу | Август - сентябрь 2020г. | Балалар баҡсаһы | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Ижади төркөм |
| 9 | Төркөмдәрҙә «Иң яҡшы илһөйәрлек тәрбиәһе биреү үҙәге» конкурсы | Ноябрь 2020 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәселәр<br>Эксперт төркөмө |
| 10 | Башҡорт халҡының ғөрөф - ғәҙәттәре һәм тормош-көнкүреше менән таныштырыу буйынса төркөмдәрҙә мини – музейҙар ойоштороу | Март 2021 | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәселәр<br>Эксперт төркөмө |
| **Ата – әсәләр менән эш** | | | | |
| 1 | Балалар баҡсаһында, төркөмдәрҙә үҫеш мөхите булдырыуҙа ҡатнашыу | Йыл әйләнәһенә | Балалар баҡсаһы | Ата – әсәләр комитеты |
| 2 | Президент гранты фонды ярҙамында 3 йәшкә тиклемге һаулыҡ мөмкинселектәре сикләнгән балалары булған | 2019-2020<br>2020-2021 | Балалар баҡсаһы<br>«Сибай, алға!» йәмғиәт ойошмаһы | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Белгестәр |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | ата – әсәләр өсөн Ресурс үҙәге асыу | | | |
| 3 | Ата – әсәләр өсөн семинар – практикум для родителей «Кескәйҙәрҙе фольклор менән таныштырығыҙ» | | Балалар баҡсаһы | Тәрбиәселәр |
| 4 | Бишек йырҙары буйынса онлайн- конкурс | 2020-2021 | Балалар баҡсаһы | Ата – әсәләр комитеты Тәрбиәселәр эксперт төркөмө |
| 5 | Тематик консультациялар циклы:<br>- «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы халыҡ традицияларына ылыҡтырыу саралары»;<br>- «Бәйләнешле телмәр үҫтереүҙә халыҡ ижады»;<br>-«мәктәпкәсә йәштәге балаларға гендер тәрбиәһе биреү»;<br>-«Ҡурсаҡ – этник мәҙәниәтле белем биреү ысулы»;<br>-« Доман – Маниченко методикаһының иртә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереүҙәге роле» | 2019-2020<br>2020-2021 | | Тәрбиәселәр Белгестәр |
| 6 | Семинар – практикум «Фекерләү карталарын балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә нисек ҡулланырға?» | 2020-2021 | | Мәктәпкә әҙерлек төркөмө тәрбиәселәре |
| 7 | Оҫталыҡ синыфы «Селтәр – һаҡалдарҙы этностилдә эшләү» | 2018-2019 | | Тәрбиәсе Бүләкәнова Г.Р. |
| 8 | Футболкаларҙы һәм күлдәктәрҙе этностилдә биҙәү буйынса оҫталыҡ синыфы | 2019-2020 | | Тәрбиәсе Рәсүлева З.В. |
| **Проекттың мғлүмәти саралары** | | | | |
| 1 | Проектты балалар баҡсаһының рәсми сайтына һалыу | | | Сайтты алып барыусы педагог |
| 2 | Инновацион технологиялар | Йыл | | Өлкән тәрбиәсе |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | буйынса буклеттар, памяткалар әҙерләү | әйләнәһенә | | Педагогтар |
| 3 | Проектҡа прещзентация әҙерләү | Май 2021 | Балалар баҡсаһы | Өлкән тәрбиәсе Эшсе төркөм |




**Проекттың мәғлүмәти тәьминәте**

1. Ф.Г.Аҙнабаева, Г.Ш.Әлбәкова, А.Р.Буранбаева, К.Ф.Мортаева. Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы. Башҡортостан – тыуған илем. – Өфө: Китап, 2017;
2. Инновационная программа «От рождения до школы» под редакцией Н. Е. Вераксы, Т.С.Комаровой, З.М.Дорофеевой (2020г.);
3. Р.Л.Агишева. Фольклор и литература Башкортостана.- Уфа: Китап, 2011;
4. Р.Л.Агишева. Мин – башҡортостанлы. Өлкән төркөм балалары менән эштә программа - ҡулланма (башҡорт телендә);
5. Р.Л.Агишева. Я познаю Башкортостан. Учебно-методическое пособие для педагогов дошкольных образовательных учреждений и учителей начальных классов. – Уфа, БИРО, 2008;
6. Л.Н.Гасанова, Р.Х.Гасанова. Словесное творчество дошкольников на основе национальной культуры башкирского народа. – Уфа: издательство, ИРО РБ, 2016;
7. Р.Х.Гасанова. Развитие образной речи детей дошкольного возраста средствами художественной литературы. – Уфа: издательство, ИРО РБ, 2015;

8. З.Г.Нафикова. Уйнай- уйнай үҫәбез. Тәрбиәселәр өсөн методик ҡулланма. (башҡорт телендә). – Өфө:Китап, 2010;
9. Ф.Г.Аҙнабаева, Г.Р.Йылҡыбаеваа А.З.Нарынбаева, М.Р.Харисова, Р.И.Әминева “Гөлбостан”. Телмәр үҫтереү буйынса методик ҡулланма (башҡорт телендә). - Өфө: Китап.2010;
10. Ф.Г.Аҙнабаев, Л.М.Иманғолова, А.Т.Мөхәмәтйәрова. Башкортостан – Гөлбостан. Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү буйынса хрестоматия. - Уфа: Китап.2017.

**III этап. Йомғаҡлау этабы.**

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Йомғаҡлау сараһы үткәреү «Тел – хаҡымдың бөйөк хазинаһы» | Май | Ижади төркөм Тәрбиәселәр |
| 2 | Проект һөҙөмтәләре буйынса отчет әҙерләү | Май | Эшсе төркөм |
| 3 | Методик ҡулланмалар әҙерләү:<br>- «Прект эшмәкәрлеге аша мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаки – илһөйәрлек тәрбиәһе биреү»,<br>- «Инновацион технологиялар аша балаларҙы башҡорт халҡының традицияларына, тарихына, мәҙәниәтенә, традицияларына ылыҡтырыу»,<br>- «Тел байлығы – ил байлығы» - инновацион технологиялар ҡулланып әҙерләнгән телмәр үҫтереү буйынса конспекттар йыйынтығы | Март – май 2021 | Творческая ижади төркөм Тәрбиәселәр Белгестәр |

**Проектты тормошҡа ашырыуҙа көтөлгән һөҙөмтәләр**

Тәҡдим ителгән проект башҡорт телен тыуған тел булараҡ һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе балалар баҡсаһында этник мәҙәниәтле мөхит булдырыу инструменты булып хеҙәм итә һәм түбәндәге һөҙөмтәләргә ирешеүгә йүнәлтелгән:

**эффектлы һөҙөмтәләр**:

- Бала үҫтереү үҙәге «Ҡурай» балалар баҡсаһы педагогтарының белем биреү эшмпәкәрлеген камиллаштырыу һәм рухи – әхлаки тәрбиә биреү өлкәләрендә профессиональ компетентлыҡтарын формалаштырыу һәм квалификацияларын күтәреү;
- Балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәрҙең телебеҙгә ҡағылышлы төрлө кимәлдәге конкурстарҙа, фестивалдәрҙә, конференцияларҙа, акцияларҙа ҡатнашыу сифатын күтәреү;

- башҡорт халыҡ традицияларына һәм тыуған телде үҫтереүгә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә ата – әсәләрҙең яуаплылығын көсәйтеү.

**продуктив һөҙөмтәләр:**

- Балалар баҡсаһында этник мәҙәниәтле үҫтереүсе күргәҙмәле мөхит булдырыу;

-Федераль дәүләт белем биреү стандарты талаптарына ярашлы «телмәр үҫтереү» өлкәһе сиктәрендә башҡорт телен үҫтереү системаһы булдырыу;

-«Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә инновацион технологиялар», «Проект эшмәкәрлеге аша балаларға әхлаки – илһөйәрлек тәрбиәһе биреү», «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы этник мәҙәниәтенә ылыҡтырыуҙа заманса технологиялар» исемле методик тәҡдимдәр йыйынтығы баҫтырып сығарыу;

-Балаларҙың телмәрен үҫтереү һәм әхлаки – илһөйәрлек тәрбиәһе биреү буйынса алдынғы эш тәжрибәһен йомғаҡлау һәм таратыу.

**Проектты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә:**

- балалар милли традицияларға, мәҙәниәткә, халҡыбыҙ тарихына, теленә ҡыҙыҡһыныу, ихтирам итеү тойғоһо белдерәләр;
- балаларҙың аралашыу күнекмәләре һәм бәйләнешле телмәрҙәре үҫешә;
- педагогтар балаларҙы башҡорт халҡының традицияларына, тарихына, мәҙәниәтенә ылыҡтырыу буйынса эффектлы технолгиялар өйрәнәләр. Бынан тыш, педагогтар балалар, ата – әсәләр һәм социум менән актив хеҙмәттәшлек итеү буйынса тәжрибәләр туплайҙар.

**Төп һөҙөмтә:**

«Ҡурай» балалар баҡсаһында башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса *белем – тәрбиә биреү эштәренең сифатын күтәреүгә йүнәлтелгән идара итеү системаһы* булдырыу.

**Проекттың һөҙөмтәһен баһалау системаһы**

Проекттың һөҙөмтәһен баһалау системаһы түбәндәгеләрҙе үҙ эсенә ала:

- проектты тормошҡа ашырыу һәм үҙ – ара килешеп эш итеү буйынса дөйөм координация;

- айырым саралар исемлеген дөрөҫләү һәм үтәү сроктарын асыҡлау буйынса тәҡдимдәр әҙерләү;

- проектты тормошҡа ашырыуҙы мәғлүмәт сараларында күрһәтеү;

- проектты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләренә мониторинг.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың этник мәҙәниәтле белем кимәлен баһалау өсөн Е.С.Бабунова тәҡдим иткән педагогик – психологик диагностика критерийҙары ҡулланылды. Был критерийҙар

Р.Х.Гасанованың «Земля отцов» исемле программаһында бирелгән. Балаларҙың телмәр үҫеш кимәлен билдәләүҙә ЮВ.Карпованың «Тропинки» программаһына ярашлы тәкдим иткән 3-7 йәшлек балаларҙың индивидуаль үҫеш кимәлен билдәләүсе телмәр үҫтереү критерийҙары ҡулланыш тапты.

Тәрбиәләнеүселәрҙең этник мәҙәниәтле белем кимәлен асыҡлау әңгәмәләр, күҙәтеүҙәр, һүрәтләү эштәрен анализлау барышында асыҡланды.

**Балаларҙың этник мәҙәниәтле компетентлығының формалашыу кимәле буйынса йыйылма диагностика (3-7 йәш)**

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса йыйылма диагностика һөҙөмтәләре (3-7 йәш)**

| Уҡыу йылы | Культура сараһы булараҡ телмәр менән файҙаланыу | Һөйләү телмәренең бөтә компонеттары үҫешкән һәм төрлө эшмәкәрлектәрҙә ҡулланыла | Китапҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм китапҡа ихтыяжын белдерә | Дөйөм балдар |
|---|---|---|---|---|
| 2018-2019 | 60% | 55% | 60% | 58% |
| 2019-2020 | 70% | 60% | 80% | 70% |
| 2020-2021 | 82% | 71% | 90% | 81% |



Диагностика һөҙөмтәһендә телмәрҙең бөтә компоненттарын да үҫтереү буйынса эште дауам итергә кәрәклеге асыҡланды, атап әйткәндә ҡушма һөйләмдәр төҙөү, телмәрҙә ҡылымдар һәм сифаттарҙы актив ҡулланыу.

Иң мөһим һөҙөмтәләр 2021-2021 уҡыу йылының аҙағында башҡарыласаҡ.

Быға тиклемге һығымталар күрһәтеүенсә проектты тормошҡа ашырыу барышында этник мәҙәнитәле белем биреү, бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса тотороҡло үҫеш динамикаһы күҙәтелә:

- Инновацион технологиялар ҡулланыу һөҙөмтәһендә тәрбиәләнеүселәрҙең, педагогтарҙың һәм ата – әсәләрҙең (законлы вәкилдәрҙең) дә телмәр культураһы үҫеште.
- Башҡорт теле байлығын, этнокультура традицияларын пропагандалауҙа педагогтарҙың роле күтәрелде.
- Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың үҙ тыуған теленә ҡарата яуаплы ҡарашы көсәйә бара.

**Проектты тормошҡа ашырыу буйынса йомғаҡтар**

Башҡортостан Республикаһы Сибай ҡалаһы ҡала округының Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы Бала үҫтереү үҙәге – «Ҡурай» балалар баҡсаһының

**ӘҺӘМИӘТЛЕ ҠАҘАНЫШТАРЫ**

| № | дата | Һөҙөмтә |
|---|---|---|
| 1 | 2018 | «Өлгөлө балалар баҡсаһы» (Образцовый детский сад) бөтә Рәсәй конкурсында **ЕҢЕҮСЕ ДИПЛОМЫ** |
| 2 | 2018 | Сибай ҡалаһы белем биреү учреждениелары араһында үҙешмәкәр художестволы сәнғәт смотр – конкурсында **I УРЫН** |
| 3 | 2019 | Балалар баҡсалары араһында балалар театр коллективтарының фестиваль – конкурсында **I УРЫН** |
| 4 | 2019 | Президент Гранты фонды ярҙамында яуланған **ПРОЕКТ «Ҡаршылыкһыҙ донья» (**«Мир без преград» ). Был проект һаулыҡ мөмкинселектәре сикләнгән иртә йәштәге балалары булған ата – әсәләр өсөн Ресурс үҙәге асыуҙы күҙаллай. |
| | 2020 | Һаулыҡ мөмкинселектәре сикләнгән иртә йәштәге балалары булған ата – әсәләр өсөн **РЕСУРС ҮҘӘГЕ** асыу |
| 5 | 2020 | 2—1,5 йәшлек балалар өсөн **ЯСЛИ ТӨРКӨМӨ АСЫЛДЫ.** |
| 6 | 2020 | 2020-2021 уҡыу йылына әҙерлек буйынса **I УРЫН** |

Башҡортостан Республикаһы Сибай ҡалаһы ҡала округының Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы Бала үҫтереү үҙәге – «Ҡурай» балалар баҡсаһы педагогтарының

## ӘҺӘМИӘТЛЕ ҠАҘАНЫШТАРЫ

| № | Үткәрелгән саралар | Педагогтың исем – шәрифәттәре | Вазифаһы | Дата | Һөҙөмтә |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Рәсәй Федерацияһы мәғарифты үҫтереү институтының «Федераль дәүләт белем биреү талаптарын тормошҡа ашырыу сараһы булараҡ вариатив – үҫтереүсе белем биреү» («Вариативно – развивающее образование как инструмент достижения требований ФГОС ДО») темаһына ярашлы «телмәр үҫтереү» һәм «танып белеү үҫтереү» йүнәлештәре буйынса эксперименталь майҙансыҡ эштәренең һөҙөмтәһе булып методик әсбаптар донъя күрҙе | Дәүләтбирҙина А.С.<br>Кәримова Й.С.<br>Халисова Г.Я. | Өлкән тәрбиәсе<br>Педагог-психолог<br>Балалар баҡсаһы мөдире | 2019 | **Иртә йәштәге балалар өсөн <u>«Кескәйҙәр донъяһына һуҡмаҡтар» программаһы</u>** |
| | | Ғәйетова З.Р. | Уҡытыусы - дефектолог | 2019 | **<u>Методик ҡулланма</u> «Матур һөйләшергә өйрәнәм»** |
| | | Ғәйетова З.Р.<br>Урмантаева Г.Б.<br>Хурамшина Г. | Дефектолог<br>Логопед<br>Логопед | 2019 | **<u>Методик ҡулланма</u> «2-3 йәшлек балаларҙың телмәрен үҫтереү»** |
| | | Рәсүлева З.В. | Тәрбиәсе | 2019 | **Иртә йәштәге балалар өсөн шиғырҙар, ҡыҫҡа хикәйәләр, бармаҡ уйындары <u>йыйылмаһы</u>** |
| | | Рәсүлева З.В. | Тәрбиәсе | 2019 | **«Шаян бармаҡтар» - <u>бармаҡ уйындары</u>** |
| | | Яҡупова Н.З. | Тәрбиәсе | 2019 | **«Йомро – йомро йомғағым»- <u>һүрәтле йомаҡтар йыйылмаһы</u>** |
| | | Мәхмүтова М.З.<br>Якупова Н.З. | Тәрбиәселәр | 2019 | **<u>Методик әсбап</u> «Иртә йәштәге балаларҙың танып белеү** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | **үҫеше»** |
| 2 | Башкортостан республикаһы буйынса Конкурс «Йыл педагогы - 2018» | Валиева Н.З. | Тәрбиәсе | 2019 | **Лауреат** |
| 3 | Башкортостан республикаһы буйынса Конкурс «Йыл педагогы - 2018» | Ғәзизова А.Й. | Өлкән тәрбиәсе | 2019 | **Муниципаль кимәлдә номинация «Иң яҡшы өлкән тәрбиәсе»** |
| 4 | Сибай ҡалаһы башҡорт төркөмдәрендә тәрбиәләнеүселәрҙең телмәр үҫешендә инновацион технологиялар ҡулланыу буйынса проекттар фестиваль – конкурсы | Мәхмүтова М.З. | Тәрбиәсе | 2019 | **1.II урын**<br>**2.Телмәр үҫтереү буйынса «Ҡурай» балалар баҡсаһы педагогтарының эш тәжрибәләре <u>«Уйнап өйрәнәбеҙ»</u> методик йыйынтыкта баҫылып сыкты.** |
| 4 | Башҡортостан республикаһында үткәрелгән «Инновацион практикалар феситвале» | Ишҡыуатова З.М.<br>Валиева Н.З.<br>Дәүләтколова Н.Р.<br>Хасаева Г.З.<br>Ғәйетова З.Р. | Тәрбиәселәр<br>Уҡытыусы - дефектолог | 2018-2019<br>2019-2020<br>2020-2021 | Сертификат<br>Сертификат<br>Сертификат<br>**II урын**<br>Сертификат |
| 5 | «Республика намыҫы өсөн» («За честь Республики») рухи – әхлаки һәм гражданлыҡ-ватансыллыҡ тәрбиәһе биреү | Мәхмүтова М.З.<br>Хасаева Г.З. | Тәрбиәселәр | 2018<br>2020 | **III место**<br>Сертификат |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | буйынса Республика конкурсы | | | | |
| 7 | Педагогтар өсөн «Рыбаков фонды» тәкдим иткән Л.С.Выготский исемендәге конкурс | Ғәйетова З.Р. | Уҡытыусы - дефектолог | 2018 | Сертификат |
| 8 | Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың техник ижад һәләтен үҫтереү буйынса Республика кимәлендәге конкурс | Вәлиева Н.З. Ишҡыуатава З.Ь. | Тәрбиәселәр | 2018 | **«Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың техник ижад һәләтен үҫтереү буйынса өҫтәлмә белем биреү» исеме аҫтында программа баҫылып сыкты** |
| 9 | Сибай ҡалаһы Администрацияһы башлығы грантына Йәш педагог» конкурсы | Мәхийәнова Ю.И. | Тәрбиәсе | 2019 | **«Халыҡ традициялаарын һаҡлау» номинацияһы Диплом** |
| 10 | Сибай ҡалаһында мәғариф ветерандары ҡатнашлығында ойошторолған фәнни – ғәмәли конференция «Быуындар бәйләнеше» | Кәримова Й.С. | Педагог - психолог | 2019 | **«Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халҡының милли культураһына, традицияларына ылыҡтырыу» темаһына эш тәжрибәһенән мәҡәлә «Связь поколений» исемле китапҡа индерелде.** |
| 11 | Кескәйҙәргә хужожестволы – эстетик тәрбиә биреү буйынса эш тәжрибәһен дөйөмләштереү | Мәхиянова Ю.И. | Тәрбиәсе | 2019 | **Методик ҡулланма «Иртә йәштәге балаларҙың һүрәтләү эшмәкәрлеге»** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 12 | «Фребель бүләктәре ҡулланмаһын (Дары Фребеля) мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың танып белеү үҫешендә ҡулланыу темаһына алдынғы эш тәжрибәһен дөйөмләштереү» | Вәлиева Н.З. | Тәрбиәсе | 2019 | **<u>Методик ҡулланма</u> «Иртә йәштәге балаларҙы үҫтереүҙә Фребель бүләктәре»** |
| 13 | Сибай ҡалаһының балалар баҡсалары араһында «Иртә йәштәге балалар менән эштә инновацион идеялар » фестивале | Вәлиева Н.З.<br>Расүлева З.В.<br>Хәсәнова А.С.<br>Дәүләтҡолова Н.Р.<br>Бикмәтова Л.А.<br>Хасаева Г.З.<br>Кәримова Й.С.<br><br>Ғәйетова З.Р.<br><br>Урмантаева Г.Б.<br>. | Тәрбиәселәр<br><br><br><br><br><br>Педагог – психолог<br>Уҡытыусы – дефектолог<br>Уҡытыусы – логопед | 2019 | **Педагогтарҙың сығыштарын сағылдырыусы материалдар <u>«Инновационные педагогические идеи в работе с детьми раннего возраста»</u> исемле <u>китапҡа</u> индерелде.** |
| 14 | | Бүләкәнова Г.Р.<br>Мәхйәнова Ю.И.<br>Хасаева Г.З.<br>Урмантаева Г.З. | Тәрбиәселәр | 2019 | **<u>Методик әсбап «Йәйғорло ижад»</u> инновационным по технологиям изобразительной деятельности в младшей группе** |
| 15 | Президент Гранты конкурсы | Арғымбаева А.Ф.<br><br><br>Халисова Г.Я. | Балалар баҡсаһы мөдире<br>Педагог-психолог | 2019-2020 | **<u>«Мир без преград» «Ҡаршылыкһыҙ донъя»</u> исемле <u>ПРОЕКТ</u> еңеп сыкты** |
| 16 | Сибай ҡалаһы балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре тәрбиәселәренең методик берекмәһендә Алдынғы эш тәжрибәһен дөйөмләштереү | Махмутова М.З. | Воспиатель | 2019-2020 | **1.<u>Методическое ҡулланма</u> «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың образлы телмәрен үҫтереү технологиялары» 2. «100 йыллыҡа бәләкәстәрҙән 100** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың образлы телмәрен үҫтереү» | | | | **йомаҡ» - <u>балалар уйлап сығарған шиғырҙар йыйынтығы</u>** |
| 17 | Сибай ҡалаһының мәғариф ветерандары ҡатнашлығында ойошторолған фәнни – ғәмәли конференцияла «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләүҙә башҡорт халҡының этник мәҙәни үҙенсәлектәрен ҡулланыу буйынса педагогтарҙың компетентлығын үҫтереү» темаһына сығыш әҙерләү | Кәримова Й.С. | Тьютор | 2020 | **<u>Мәкәлә мәғариф бүлеге әҙерләгән йыйынтыкта баҫылды</u>** |
| 18 | Республика буйынса берҙәм дәрес конкурсы «Милли кейем – халыҡ мираҫы» | Рәсүлева З.В. | Тәрбиәсе | 2020 | **I урын** |
| 19 | Башҡортостан респубилкаһы кимәлендә конкурс «Мәктәпкәсә белем биреү йөкмәткеһенең медиаконтенты» | Мәхмүтова М.З. | Тәрбиәсе | 2020 | **Призер** |
| 20 | Республика конкурсы «Салауат рухы беҙҙең йөрәктәрҙә» | Азаматова А.Ф. | Тәрбиәсе | 2020 | **1 урын** |
| 21 | Республика конкурсы «Салауат рухы беҙҙең йөрәктәрҙә» | Хасаева Г.З. | Тәрбиәсе | 2020 | **1 урын** |
| 22 | Сибай башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты тарафынан ойошторолған конкурс «Хатаһын тап!» (рекламалар, | Мәхмүтова М.З.<br>Мәксүтова Р.Р. | Тәрбиәселәр | 2020 | **I урын**<br>**III урын** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | баннерҙар, вывескаларҙың дөрөҫ яҙылышына анлиз яһау) | | | | |
| 23 | Бөтә донъя башҡортары ҡоролтайы тарафынан ойошторолған флешмобтар, конкурстар | | Тәрбиәселәр | Системалы рәүештә | **Сертификаттар Маҡтау ҡағыҙҙары** |
| 24 | Интернет – викторина «Минең республикам», | Мәхмүтова М.З. | Тәрбиәсе | 2020 | **III урын** |
| 25 | «йыл педагогы - 2020» | Урмантаев Г.З. | Тёрбиёсе | 2020 | **«Тыуған телдә балаларға белем биреү» номинацияһында еңеүсе** |
| 26 | Сибай ҡалаһында «Йәш ғаилә» конкурсы | Азаматова А.Ф. | Тәрбиәсе | 2020 | **«Иң ижади ғаилә» номинацияһында еңеүсе** |
| 24 | Башҡортостан республикаһы масштабында ойошторолған «Милләт әсәһе» конкурсы | Мәхмүтова М.З. | Тәрбиәсе | 2021 | **Һөҙөмтә әле билдәле түгел** |

Башҡортостан Республикаһы Сибай ҡалаһы ҡала округының Муниципаль мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы Бала үҫтереү үҙәге – «Ҡурай» балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәренең

## ӘҺӘМИӘТЛЕ ҠАҘАНЫШТАРЫ

| № | Саралар | Баланың исем - шәрифәттәре | Куратор | Дата | Һөҙөмтә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | **Муниципаль кимәл** | | |
| 1 | Сибай ҡалаһы балалар баҡсалары араһында үткәрелгән фестиваль «Күк ҡош» | Көнсыуаҡов Тамерлан | Тәрбиәсе Яҡупова Н.З. | 2018 | **I УРЫН** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 2 | Телмәр етешһеҙлектәре булған балалар ҡатнашлығындағы Сибай ҡалаһында үткәрелгән телмәр үҫтереү буйынса Олимпиада | Ҡәдиров Азамат | Уҡытыусы – дефектолог Ғәйетова З.Р. | 2019 | **I УРЫН** |
| 3 | Сибай ҡалаһында мәктәпкәсә йәшлек балалар араһында үткәрелгән шиғыр һөйләүселәр конкурсы «Еңеү яҙы» | Азаматов Нургиз | Тәрбиәсе Хасаева Г.З. | 2020 | **I УРЫН** |
| 4 | Сибай ҡалаһында мәктәпкәсә йәшлек балалар араһында үткәрелгән шиғыр һөйләүселәр конкурсы «Еңеү яҙы» | Ишҡыуатов Амур | Тәрбиәсе Ишҡыуатова З.М. | 2020 | **III УРЫН** |
| 5 | Сибай ҡалаһында ойошторолған ижади конкурс «Минең Республикам, минең тыуған ерем!» | Солтанова Элина | Тәрбиәсе Дәүләтколова Н.Р. | 2020 | **III УРЫН** |
| 6 | Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған Сибай ҡалаһында үткәрелгән техник ижад буйынса онлайн – конкурс | Байғужина Нәргизә | Урмантаева Г.З. | 2020 | **I УРЫН** |
| **Башкортостан Республикаһы кимәлендә** | | | | | |
| 1 | М.Кәримдең 100 йыллығына арналған шиғыр | Әбдрәхимов Айназ | Тәрбиәсе | 2018 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | һөйләү конкурсы | | Валиева Н.З. | | **I УРЫН** |
| 2 | «Һаумы, һаумы әкиәт!» Республика конкурсы | Таштимерова Әмилә | Тәрбиәсе Хасаева Г.З. | 2018 | **ГРАН – ПРИ** |
| 3 | «Һаумы, һаумы әкиәт!» Республика конкурсы | Ғыуатов Искәндәр | Тәрбиәсе Рәсүлева З.В. | 2018 | **I УРЫН** |
| **Рәсәй кимәлендә** | | | | | |
| 1 | Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған бөтә Рәсәй ижади конкурсы | Таштимерова Әмилә | Тәрбиәсе Хасаева Г.З. | 2020 | **I УРЫН** |
| 2 | Мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында бөтә Рәсәй буйынса ижади конкурс «Беҙҙең бөйөк Еңеү» | Байғужина Нәргизә | Урмантаева Г.З. | 2020 | **I УРЫН** |

**Әҙәбиәт сығанаҡтары**


1. Ф.Г.Аҙнабаева, Г.Ш.Әлбәкова, А.Р.Буранбаева, К.Ф.Мортаева. Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы. Башҡортостан – тыуған илем. – Өфө: Китап, 2017;
2. Ф.Г.Аҙнабаева, Г.Р.Йылҡыбаеваа А.З.Нарынбаева, М.Р.Харисова, Р.И.Әминева "Гөлбостан". Телмәр үҫтереү буйынса методик ҡулланма (башҡорт телендә). - Өфө: Китап.2010;
3. Ф.Г.Аҙнабаев, Л.М.Иманғолова, А.Т.Мөхәмәтйәрова. Башкортостан – Гөлбостан. Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү буйынса хрестоматия. - Уфа: Китап.2017.
4. С.Бабунова. Педагогическая стратегия этнокультурной образованности детей дошкольного возраста. Монография. Москва. Флинта. 2020.
5. Инновационная программа «От рождения до школы» под редакцией Н. Е. Вераксы, Т.С.Комаровой, З.М.Дорофеевой (2020г.);
6. Н.Е.Веракса, А.Н.Веракса.Проектная деятельность дошкольников. – М: Мозаика – Синтез, 2010.
7. Н.Е.Веракса.А.Н.В.Веракса.Играем в сказку. М: Мозаика – Синтез. 2012.
8. Л.Н.Гасанова, Р.Х.Гасанова. Словесное творчество дошкольников на основе национальной культуры башкирского народа. – Уфа: издательство, ИРО РБ, 2016;
9. Р.Х.Гасанова. Развитие образной речи детей дошкольного возраста средствами художественной литературы. – Уфа: издательство, ИРО РБ, 2015;
10. Русакова А.С. Ключи к детской душе. Как рассказывать и сочинять истории и сказки. - М.: Обруч, 2015. -192 с.
11. 2.Симмонс А. Сторителлинг. Как использовать силу историй. - М.: Манн, Иванов и Фербер, 2013. - 177 с.
12. 3.Федорова С. В., Барчева А. А. Использование техники сторителлинг в работе с детьми дошкольного возраста // Молодой ученый. — 2017. — №16. — С. 515-518;
13. Т.А.Сидорчук, Н.Н.Хоменко. Технология развития связной речи дошкольников.
14. ФГОС ДО (№ 1155, 17.10.2013).
15. О.С.Ушакова.Е.А.Ушакова. Использовании серии сюжетных картин в развитии связной речи дошкольников.
16. Интернет ресурсы.

Ҡушымта 1

**Башҡорт телен өйрәнеүҙә белем биреү системаһын камиллаштырыу проектын тормошҡа ашырыуҙа ҡулланылған технологиялар**

Балалар баҡсаһында түбәндәге заман талаптарына ярашлы мөһим технологиялар ҡулланыла:

1. Әсә фольклоры
2. Образлы телмәр үҫтереү технологияһы ;
3. В.В.Воскобовичтың телмәр үҫтереү һәм танып белеү үҫтереүгә йүнәлтелгән технологияһы;
4. О.С.Ушакованың һүрәттәр серияһы буйынса бәйләнешле телмәр үҫтереү технологияһы;
5. Е.А.Смирнованың бәйләнешле телмәр үҫтереү технологияһы;
6. Н.Е.Вераксаның «Әкиәт уйнайбыҙ» исемле телмәр үҫтереү технологияһы;
7. Бәйләнешле телмәр үҫтереү сараһы булараҡ критик фекер йөрөтөү технологияһы;
8. Бәйләнешле телмәр үҫтереүҙә сторителлинг технологияһы;
9. Өндәр мәҙәниәтен үҫтереүҙә фонетик ритмика технолгияһы;
10. Башҡорт халыҡ әкиәттәрен һөйләүҙә һәм әкиәттә уйлап сығарыуҙа Пропп карталары;
11. Грамтоға өйрәтеүҙә Штернбергтың ребус алымы.
12. Мнемотехника.

**Бәйләнешле телмәр үҫтереүҙә сторителлинг технологияһы**

Бәйләнешле телмәр үҫтереү мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы шәхес итеп формалаштырыуҙа ҙур роль уйнай. Тап бәйләнешле телмәрҙә телдең иң мөһим функцияһы (коммуникатив функция) тормошҡа ашырыла ла инде. Бәйләнешле телмәр фекерләү эшмәкәрлегенең иң юғары формаһы.

Хәҙерге ваҡытта мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙә кәрәкле методикалар, фәннәи хеҙмәттәр һәм технологиялар етешле. Ә бына сторителлинг технологияһы маркетинг сфераһынан алынған. Балалар баҡсаһында был технология өлкән төркөм балаларының телмәрен үҫтереүҙә һәм байытыуҙа ғәйәт һур әһәмиәткә эйә булыуы менән ҡыҙыҡһындырҙы.

"Сторителлинг" инглиз теленән тәржемә иткәндә "ваҡиғалар һөйләү" тигәнде аңлата. Сторителлинг технологияһы нигеҙендә «Story cubes» , "Ваҡиғалар кубиктары" тигән уйын барлыҡҡа килгән. Был уйын 9 кубиктан һәм 54 һүрәттән тора. Бы уйын мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн

ауыр, сөнки ул тик символдарҙан һәм билдәләрҙән генә тора. Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн был уйынды ҡулайшатырырға мөмкин.

**Сторителлинг технологияһының маҡсаты** – балаларҙың телмәрен байытыу, төрлө хикәйәләр төҙөргә һәм һөйләргә өйрәтеү.

**Бурыстар:**

1.Балаларҙың актив һәм пассив һүҙлеген байытыу.

2.Телмәрҙе грамматик яҡтан дөрөҫ төҙөргә өйрәтеү.

3. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың коммуникатив күнекмәләрен үҫтереү.





**Уйын ҡағиҙәләре**

Иң тәүге этапта ваҡиғалар ҡыҫҡа булырға тейеш, сөнки бөтә балаларҙың да коммуникатив күнекмәләре бер тигеҙ үҫешмәгән. Шуға ла ваҡиғаны сиратлап һөйләргә тәкдим ителә.Беренсе кубикты бала ташлай, икенсеһен – тәрбиәсе. Шул рәүешле тәрбиәсе ваҡиғаға йүнәлеш бирә ала.

Балалар был уйынды яратып ҡабул итәләр һәм бик тиҙ өйрәнәләр. 2-3 уйындан һуң балалар хикәйә төҙөргә, һүрәттәрҙе бер сюжетҡа төҙөргә өйрәнәләр.

Балаларға “әкиәтсе” булырға тәкдим итергә мөмкин.

Был уйын вариантында 9 балаға тиклем бала ҡатнаша ала.

Беренсе уйынсы кубикты ташлай һәм төшкән һүртәкә ярашлы мауыҡтырғыс хикәйә – әкиәт һөйләй башлай. Башҡа уйынсылар ҡушылалар һәм сиратлап, сюжет линияһын юғалтмай, ваҡиғаны һөйләүҙәрен дауам итәләр.

Хикәйә төҙөгнәдә уйын структураһын һаҡларға кәрәк.

**Уйын структураһы**

Хикәйә ҡыҙыҡлы булыуы менән балаларҙы ылыҡтыра.

1. Инеш һүҙ.

*Бер ваҡыт, күп йылдар элек….*

*Борон – борон заманда….*

*Йәшәгән ти…..*

*Был хәл бер ҡалала (ауылда) булған…*

Һөйләүсе, “әкиәтсе” ваҡиғаның төп геройын һүрәтлә башлай. Ул уның ҡайҙа йәшәгәне, нимә эшләгәне тураһында бәйән итә.

2. Ваҡиғаның төп өлөшө.

Төп сюжет линияһы тасуирлап һөйләнелә.

- Герой менән нимә булды?
- Кемгә тап булды йәки нимә тапты?
- Быны менән ул нимә эшләргә теләй?

3.Йомғаҡлау.

- Килеп сыҡҡан проблема хәл ителә.
- Ҡыҫҡаса ваҡиғаға һығымта яһала

Сторителлинг бик мауыҡтырғыс технология. Ул балаларҙың фантазияһын, бәйләнешле телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Был технологияны һаулыҡ мөмкинселектәре сикләнгән балалар менән коррекцион эштә ҡулланырға мөмкин. Балаларҙың һүҙлек запасын, телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн үҙләштереү һәм хикәйләр төҙөргә өйрәнеү өсөн лексик темаларға таянырға тәкдим ителә.

Балаларҙы “ғалимдарға” әйләнергә тәкдим итергә була. Был осраҡта фәнни хикәйә төҙөргә мөмкин. Уйындың был вариантында мнемосхемалар ҡулланыла. Мнемосхемаларҙа һөйләү, хикәйә төҙөү алгоритмы ҡулланыла: хикәйәнең башы, уртаһы, аҙағы. Программа темаларына ярашлы һүрәттәрҙе алмаштырырға мөмкин һәм һәр лексик темаларға ярашлы яңынан – яңы хикәйләр уйлап сығарыла.

**Миҫал итеп “Йорт хайуандары” лексик темаһына ярашлы хикәйә төҙөү тәртибе.**

Хикәйә төҙөү өсөн Н.Э. Теремкова тәкдим иткән мнемосхема ҡулланыла. Мнемосхема өс өлөшкә бүленә: башы, уртаһы, аҙағы. Һәр өлөш айырым төҫ менән билдәләнә. Хикәйәнең башы – күк, уртаһы – һары, аҙағы – йәшел төҫтә.




Бала күк төçтәге кубикты ташлай һәм ниндәй һүрәт төшһә, шул хайуандың атамаһын әйтә.Икенсе күк кубикта мнемосхемаға ярашлы һүрәт эҙләй (уның өйө). Икенсе “ғалим” һары кубиктар ярҙамында ваҡиғаны дауам итә. Ә өсөнсө бала “ғалим” йәшел кубиктар ярҙамында хикәйәне һөйләп бөтөрә.

Был уйындың тағы бер варианты булыуы мөмкин. Мәçәлән, балаларға “фантазерҙар” булырға тәҡдим ителә. Балалар бирелгән алгоритмға ярашлы *көлкөлө хикәйәләр* уйлап сығарып һөйләйҙәр. Был осраҡта балалар логикаға ярашлы кубиктарҙы эҙләмәйҙәр, ә кубикты ташлағас нисек килеп сыға шулай һөйләйҙәр.

Сторителлинг техникаһы бик киң ҡулланышлы. Был технологияны *өндәрҙе автоматлаштырыу* барышында ла ҡулланырға мөмкин.

Бының өсөн һүрәттәр наборы араһынан атамаларында һүҙҙең башында, уртаһында һҙәм аҙағында автоматлаштырылған өндәр булыуы мотлаҡ.

Хикәйә төҙөгәндә бала автоматлаштырыла торған өндөң әйтелешен нығыта. Кубиктарҙы өндәргә дифференциация эшләр өсөн дә ҡулланырға

мөмкин. Был ваҡытта балаларҙың *фонематик ишетеү һәләте* үҫешә. Өндәрҙең урынлашыу тәртибен (һүҙҙең башында, уртаһында, аҙағында) билдәләгәс һәм кубиктарҙы кәрәкле тәртиптә урынлаштырғас һөйләмдәр төҙөлә.

Сторителлинг педагогтың уйындар уйлап сығарыу буйынса күҙаллауын сикләмәй. Бындай техника күп яҡлы. Бәйләнешле телмәр үҫтереүҙә ҡулланып, телмәрҙең башҡа компонеттарын да йылдам үҫтерергә мөмкин.

Шулай итеп*, сторителлинг технологияһының өҫтөнлөктәре* бик күп.

- Эшмәкәрлеккә балаларҙың ҡыҙыҡһыныуы арта, һөҙөмтәлә иғтибар концентрацияһы арта;
- Тирә йүн тураһында балаларҙың һүҙлек запасы байый;
- Телмәрҙең бөтә компоненттары ла үҫешә;
- Юғары психик функциялар йылдам үҫешә;
- Балаларҙың коммуникатив (аралашыу) күнекмәләре үҫешә.

**Критик фекерләү технологияһы**

Заман тормошо юғары фкерләү үҫтереүҙе талап итә. Мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем биреүҙә яңы технологиялар ҡулланыу – заман талабы. Инноваицялар ҡулланған ваҡытта белем алыуға балаларҙың ҡыҙыҡһыныуы арта, һөҙөмтәлә белем алыу мотивация күтәрелә.

***Критик фекер йөрөтөү технологияһының актуаллеге***

Критик фекер йөрөтөү технологияһы баланың мәғлүмәти компетентлығын күтәреүҙә ҙур роль уйнай. Критик фекер йөрөтөү технологияһы – мәғлүмәттәр менән эшләү күнекмәләрен формалаштырыусы, баланың шәхси үҫешен тәьмин итеүсе, уның фекерләүен йылдам үҫтереүсе бер бөтөн система. Критик фекер йөрөтөү бала өсөн яңы, аңлайышлы булған идеялар тикшерелгәндә,баһа биргәндә барлыҡҡа килә һәм үҫешә.

*Критик фекерләү – «нисек фекерләргә өйрәтергә?» тигән һорауға яуап биреүсе махсус методик алым.*

*Критик фекерләү технологияһы балалар баҡсаһында түбәндәге бурыстарҙы тормошҡа ашырырға булышлыҡ итә:*

• балала белем алыуға ынтылыш уятыу;

• баланы тәрбиәсе биргән һорауҙарға яуап биргәндә түгел, ә үҙенең һорауҙары, проблемалары аша фекерләргә өйрәтеү;

• балала белем алыуға ҡарата ижади ҡараш тәрбиәләү.

<u>Критик фекер йөрөтөү технологияһы балаларға үҙаллы белем үҙләштерергә, үҙ фекерен әйтергә, белемдәрен стандар һәм стандарт булмаған ситуацияларҙа ҡулланырға ярҙам итә. Бынан тыш, яңы һорауҙар бирергә, төрлө аргументтар булдырырға һәм уларҙы раҫларға ярҙам итә, үҙаллылыҡ, яуаплылыҡ сифаттары, монологик һәм диалогик телмәр үҫтереүгә булышлыҡ итә.</u>

Критик фекерләү технологияһы белем үҙләштереүҙә ғәйәт мөһим мәғәнәгә эйә:
- төрлө мәғлүмәти саралар менән эшләргә өйрәнеү;
- һорауҙар биреү һәм үҙаллы гипотеза формалаштырыу;
- проблемалар сисеү;
- үҙ фекерен белдерергә өйрәтеү;
- үҙ фекерен асыҡ, аңлайышлы, ышанысла белдереү;
- үҙенең фекерен иҫбат итә, башҡаларҙың фекерҙәрен иҫәпкә алырға өйрәтеү;
- башҡалар менән үҙ – ара килешеп эшләргә өйрәтеү.

**Критик фекерләү технологияһы буйынса ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге структураһы:**

1 фаза – вызов (ҡаршы сығыу) (яңы белем алырға ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу уятыу)
2 фаза – осмысление содержания (йөкмәткеһенә төшөнөү) (яңы информация алыу)
3 фаза – рефлексия (яңы белем барлыҡҡа килеүе)

**Критик фекерләү алымдары:**

• Дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған фекер;
• Кластер;
• Юрау ағасы;
• Туҡталыштар менән уҡыу;
• Синквейн;
• Схемалар буйынса һөйләү, ятлау һ.б.

Критик фекерләү- актив, ижади алымдарҙың береһе. Әгәр ҙә балаларҙың ижади, аныҡ фекер йөрөтөүсе кеше итеп үҫтерегә теләһәгеҙ, уны төрлө мәғлүмәттәр менән «һыйламағыҙ», ә критик фекер йөрөтөргә, анализларға, ҡабул ителгән мғлүмәт буйынса һығымта яһарға өйрәтегеҙ.

Балалар баҡсаһында түбәндәге эш формалары ҡулланыла:

- Дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған фекер;
- Асыҡ һорауҙар ярҙамында юрау;
- Кластер;
- Терәк сигналдары;
- Юрау (прогноз яһау);
- Синквейн;
- Ассоциатив ҡыуаҡ һ.б.

**Методик алым «Беләм, белергә теләйем, белдем»**

Был алымды 3 йәшлек балалар менән ҡуллана башларға мөмкин.

**Алымдың структураһы**.

- Балаларға тема әйтелә;
- Тема тураһында балаларҙың белемдәре асыҡлана . Балаларҙың яуаптары таҡтаға яҙылып бара, йәки схематик һүрәттәр ярҙамында билдәләнә. Һәр яуап өсөн ҡыҙыл түңәрәк, йәки йондоҙ бирелә;
- Балаларҙың тема буйынса нимә белергә теләгәндәре асыҡлана. Тағы ла һорауҙар таҡтаға яҙыла йәки һүрәттәр ярҙамында билдәләнә. Йәшел йондоҙсоҡтар тапшырыла;
- Тәрбиәсе балаларҙың һорауҙарына яуап биреп бөткәс, балаларҙың нимәгә өйрәнгәндәре, нимә белгәндәре асыҡлана.
- Балаларҙың теманы үҙләштереү буйынса яуаптары таҡтаға һүрәтләнә бара һәм һары йондоҙҙар тапшырыла.
- Әгәр ҙә һары йондоҙҙар ҡыҙыл йондоҙҙарҙан күберәк булһа, материал үҙләштерелгән һанала. Әгәр ҙә киреһенсә булһа, теманы яңынан киләһе эшмәкәрлектә ҡабатларға тәҡдим ителә.

**Мәҫәлән, "Ҡырағай хайуандар" темаһы**

-Ҡырағай хайуандар тураһында һеҙ нимә беләһегеҙ? (Улар урманда йәшәй, үлән ашайҙар. Йырткыс хайуандар ҙа була. Ҡырағай хайуандарҙың тәне йөн менән ҡапланған) (һәр яуап өсөн ҡыҙыл йондоҙ тапшырыла)

-ҡырағай хайуандар тураһында һеҙ тағы нимә белергә теләр инегеҙ? (балалар ошондай һорауҙар бирергә мөмкин: ни өсөн ҡуян ҡышын аҡ, ә йәйен һоро? Ҡырағайхайуандар ҡыш көнө нимә менән туҡланалар? һ.б.), (һорау өсөн – һары йондоҙ)

- Һуңынан, балаларҙың һорауҙарына яуаптар бирелә. Әгәр ҙә балалар тәрбиәсе яуабын белмәгән һорау бирһәләр, ул әҙерләнеп килеп яуабын әйтергә теләген белдерә.

- Артабанғы этапта тәрбиәсе балаларға һорауҙар бирә:

Һеҙ нимә тураһында белдегеҙ? (һәр яуапҡа һары йондоҙ бирелә)

Был алым балаларҙың активлығын арттыра, иғтибарын үҫтерә, уларҙың темаға ҡарата ҡыҙыҡһыныуын күтәрә. Сөнки маҡсатты балалар үҙҙәре ҡуялар бит!

**Алым «Асыҡ һорауҙар ярҙамында прогноз яһау (юрау)»**

Педагог ниндәй ҙә булһа балалар өсн булған нәфис әҙәбиәттән программаға ярашлы әҫәр һайлап ала.Финал көтөлмәгәнсә булыуы мөмкин. Хикәйәне уҡыу барышында педагог көтөлмәгән хәлдәр булған ерҙә туҡтай һәм балаларға һорауҙар бирә: «Һеҙ нисек уйлайһығыҙ артабан нимә булыр икән?»., «Ни өсөн һеҙ шулай тип уйлайһығыҙ?». Бындай һорауҙар балаларҙың фекерләү ҡеүәһен арттыра, мейеләрен эшләтә. Әҫәрҙе уҡып бөткәс, балалар менән уларҙың версияларының әҫәргә ярашлы оҡшашлыҡтарын һәм айырмалыҡтарын табырға тәҡдим ителә. Бындай алым балаларҙы логик фекерләргә генә өйрәтеп

ҡалмай, ә  дөрөҫ һөйләргә лә булышлыҡ итә. Ни тиклем бала күберәк бәхәсләшә, үҙенең фекерен иҫбатларға тырыша, шул тиклем уның телмәре таҙа һәм грамоталы була. Бәхәстең мөһим ҡағиҙәһен үтәү мотлаҡ- аргументһыҙ фекерҙәр ҡабул ителмәй. Һәр бала үҙенең фекерен әйткән ваҡытта, ни өсөн ул шул фекерҙә икәнен иҫбат итә. **«Асыҡ һорауҙар ярҙамында прогноз яһау (юрау)»** алымын  ойошторолған эшмәкәрлектәрҙә генә түгел, ә  барлыҡ режим моменттарында ла ҡулланырға мөмкин.

*Миҫал килтерәйек.*

*Тема З.Хисмәтуллиндың* **"КҮСТӘНӘС"** *хикәйәһе.*

**Ҡаршы сығыу**  фазаһында  балаларға  хикәйәнең темаһы буйынса  фекер алышырға тәҡдим итәбеҙ.

- Ни өсөн хикәй «Күстәнәс» тип атала? Бындай атамалы хикәйә нимә тураһында булыуы мөмкин? Балаларҙың фекерҙәре таҡтала яҙып барыла.

**Йөкмәткеһенә төшөнөү** фазаһында   тексты бер нисә өлөшкә бүлеп уҡырға тәҡдим ителә. Һәр өлөш  артабан  уйланырға һәм прогноз яһауға йүнәлтелгән булырға тейеш.  Өлөштәр һайын төрлө һорауҙар бирелә.

Текст уҡыла:

*Айытбайҙың әсәһе  ауырып  ята.  Бик  ауыр уға,  тамағына ятҡан көйөнсә генә ашай: табиптар йәрәхәте уңалғансы ҡуҙғалырға ҡушмағандар. Әсәһе ауырый башлау менән, күрше ауылдан Айытбайҙың өләсәһе килеп етте. Көн  һайын  тип  әйтерлек  табип килә. Күршеләре лә инеп хәл белешеп торалар. Бөгөн генә Айытбай яңғыҙы  тороп  ҡалды.  Өләсәһе  ауылына ҡайтып китте. Ул киҫкә генә киләсәк. Атаһы ла эштән ҡайтып етмәгән, шуға  күрә  бөтә эште һнгеҙ йәшлек Айытбайға башҡарырға тура киләсәк.*

*Ул, әсәһе һораһа,  дарыу  йәки  һыу алып  бирә,  юрғанын  килеп  яба,  тәҙрәнән ҡояш төшә башлаһа,  ҡорғанды тартып ҡуя.*

*—  Һин булмаһаң,  миңә бөтөнләй ҡыйын булыр ине,  — ти әсәһе Айытбайға һәм иркәләп башынан һыйпай. Айытбай, урамдан үтеп барыусы хат ташыусыны күреп, тышҡа  йүгереп сыҡты.*

Һорауҙар:

- Ни өсөн Айытбай урамға йүгереп сыға?.
- Ул почтальондан нимә көтә?
- Хәҙер кешеләр хат яҙышалармы?  Ни өсөн?

Тәрбиәсе таҡтаға балаларҙың фекерҙәрен яҙып бара: хат, посылка, бүләк.

- Артабан нимә булды тип уйлайһығыҙ? (балаларҙың фекерҙәре)

Тәрбиәсе хикәйәне уҡыуын дауам итә:

*— Апай,  беҙгә хат бармы?  — тип һораны ул.*

*— Хат юҡ, улым, — тине хат ташыусы, — гәзит бар. Әсәйеңә ҡараштырырға  журнал  да  килтерҙем.  Юғиһә,  уның  бер  үҙенә күңелһеҙҙер.*

*Айытбай гәзит-журналдарҙы алып китергә генә ыңғайлағайны, уны тағы ла почтальон саҡырып алды.*
*— Кил әле, улым, — тине ул, сумкаһынан ҡып-ҡыҙыл ҙур алма сығарып.*
*— Бына был һиңә.*
*Айытбай, нимә тип әйтергә лә белмәй, аптырап ҡалды.*
*— Ал, ал, — тип ҡыҫтаны хат ташыусы, — был һиңә күстәнәс.*
*Айытбай рәхмәт әйтте лә йүгереп өйгә инеп китте.*

Һорауҙар:

Өйгә ингәс Айытбай нимә эшләне? (балаларҙың фекерҙәре).

- Алманы ашаны;
- Әсәһенә бирҙе.

Кешенән алманы алғас нимә эшләргә кәрәк? (алманы таҙа итеп йыуырға).
Ни өсөн?

Тормош хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Кем һөйләй? Тәрбиәсе хикәйәнең аҙағын уйлап сығарып һөйләп бөтөргә тәҡдим итә.

**Фекер йөрөтөү, уйланыу** фазаһында тәрбиәсе хикәйәне уҡып бөтөрә.

*— Нәфисә апай күстәнәс бирҙе, — тине ул әсәһенә, шатлығын йәшерә алмайынса, — мин уны һиңә бирәм. Һиңә тиҙерәк һауығырға кәрәк бит. Минең ашағым килмәй.*
*— Рәхмәт инде, улым, — тине әсәһе ҡалтыранған тауыш менән, — үҙең аша, минең тамағыма аш бармағанын беләһең бит.*
*— Бик тәмле алма, әсәй, — тип ныҡышты Айытбай.*
*— Улай булғас, бүлешеп ашайыҡ.*
*Әсәһе алманың яртыһын Айытбайға бирҙе, яртыһын үҙе ашаны.*
*— Минең бер ваҡытта ла быңдай тәмле алма ашағаным юҡ ине, — тине әсәһе һәм улын ҡосаҡлап үбеп алды.*
*Айытбай ҙа бик шат ине. Уға ни өсөндөр, был алманы ашағас, әсәһе һауығып китер кеүек тойолдо.*

Уҡып бөткәс балаларға һорауҙар бирә:

- Хикәйә шулай бөтөр тип уйланығыҙмы?

**Рефлексия стадияһында** балаларҙың фараздары тикшерелә.

- Әйҙәгеҙ иҫкә төшөрәйек. Занятие нимәнән башланды? Һеҙҙең фараздарығыҙҙың дөрөҫлөгөн тикшерәйек.

Был технологияны ҡулланыу барышында балалар хикәйәне иҫтәрендә нығыраҡ һаҡлайҙар, сөнки иғтибар таралып бөтмәй, туҡтаған һайын яңынан активлаша.

**Методик алым «Дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған юрауҙар»**

Балаларға таблица һыҙылған ҡағыҙҙар таратыла. Таблица ике бағаналы һәм ике юллы. Өҫкө юлда – рәт һандары яҙылған.

Аҫҡы рәт – буш.  Занятие темаһы билдәләнгәс, балаларға уйын тәҡдим ителә «Һеҙ ышанаһығыҙмы, әгәр.....».Тәрбиәсе фекер әйтә, ә балалар уның менән ризамы – юҡмы икәндәрен белдереп таблицаның  аҫҡы рәтенә билдәләр ҡуйып баралар: дөрөҫ булһа – (+), булмаһа – (-).

Занятие аҙағында тикшереү эшләнелә. Яңынан фекерҙәр уҡыла, ә балалар икенсе төҫлө ҡәләм менән яңынан билдәләйҙәр. Аҙаҡ балалар менән фекерҙәренең үҙгәреү -  үҙгәрмәүе тураһында әңгәмә ойошторола.

Әгәр ҙә эшмәкәрлек аҙағында   һәр һорау буйынса яуап дөрөҫ һаналһа, йәғни дөрөҫ билдә ҡуйылһа, материал үҙләштерелгән тип һанала.

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | | | | |

**Тема “Һыуҙың үҙенсәлектәре”**

- Балалар,  мин һеҙгә уйын тәҡдим итәм.  Һеҙең алдығыҙҙа таблицалар. Өҫкө рәттә һандар ҡуйылған, ә аҫҡы рәттә – буш ҡалдырылған клеткалар.

Әгәр ҙә һеҙ минең менән ризаһығыҙ икән, “плюс” билдәһе ҡуйығыҙ, риза түгелһегеҙ икән – “минус”  менән билдәләгеҙ

Һеҙ ышанаһығыҙмы?

1. Һыу аҡ төҫтө була;
2. Һыу тәмле;
3. Һыу туңһа боҙға әйләнә;
4. Һыу ҡайнаһа пар барлыҡҡа килә;
5. Һыу ҡойолмай. һ.б.
6. Һыу ҡуйы була;
7. Ҡайнамаған һыуҙы эсергә ярамай;
8. Һыу – йәшәү сығанағы;
9. Һыуһыҙ тереклек булмай;
10. Диңгеҙ һыуы тәмле була.

Таблица тултырылғас ситкә алып ҡуйыла. Тема  буйынса әңгәмә үткәрелә.. Балаларҙың һорауҙарына яуап бирелә.  Занятие аҙағында яңынан таблица менән эш тәҡдим ителә. Тәрбиәсе һорауҙар бирә. Балалар икенсе төҫлө ҡәләм менән яуаптарҙы билдәләйҙәр.  Әгәр ҙә балалар   дөрөҫ билдәләр ҡуйған булһалар, материал үҙләштерелгән тип һанала.

Был осраҡта балаларҙың иғтибары туплана, активлаштырыла. Шул уҡ ваҡытта һандар тураһында белемдәр ҙә нығый бара.

**«Кластер»  алымы**

*Материалды график рәүештә үҙләштереү технологияһы.*

1) Төп аңлатмаларҙы айырыу;

2) Аңлатмаларҙы схема рәүешендә билдәләү,  эҙмә – эҙлекле сәбәп бәйләнештәре булдырыу ;

3) Яңы кластерҙар эҙләү : схеманы тултырыу, яңы кластерҙар өҫтәү;
4) Схемаға ярашлы материал менән үҙ аллы эш.




**«Пирамида»**

**Маҡсат:** балаларҙы гипотезалар уйларға һәм төҙөргә өйрәтеү.

**Эш йөкмәткеһе:** тәрбиәсе балаларға ниндәй ҙә булһа ваҡиғаның аҙағын уйлап бөтөрөргә тәҡдим итә. Балалар түңәрәктә торалар. Һәр бала уйынды беренсе булып башлаусы ролендә булырға тейеш. Балаларҙың фекерҙәрен, гипотезаларын тәрбиәсе сикләүһеҙ ҡабул итә, ләкин уйландырырлыҡ, асыҡлаусы һорауҙар бирә.

*Миҫал өсөн*:

1.Әгәр ҙә һин йоҡонан торғас, ҡапыл күбәләккә әйләнһәң, нимә булыр ине?
2. Бөтә кешеләр ҡулдары менән баштүбән йөрөһәләр, нимә булыр ине?
3.Әгәр ҙә гел төн булып торһа, нимә булыр ине?
4.Ҡаты әйберҙәр бөтәһе лә йомшаҡҡа әйләнһә, нимә булыр ине?
5.Һин ҡапыл шкафҡа әйләнһәң нимә булыр ине? Һ.б

*Гиптоезаны иҫбатлағанда балаларҙың хәтере, фекерләүе, хыял итеүе йылдам үҫешә. Был инде критик фекер йөрөтөүҙең беренсе баҫҡысы*